РЕДАКЦИЯ ПОЧТАҺЫНАН

# Нефтсе ветерандар тәбрикләнде

**Ошо көндәрҙә “Башнефть” берләшмәһе һәм Ишембай нефть һәм газ сығарыу идаралығы етәкселеге тарафынан “Яңы йыл осҡоно” тип аталған сара үткәрелде.**

Ошо уңайҙан Ҡала мәҙәниәт һарайында Ишембай нефть һәм газ сығарыу идаралығында төрлө йылдарҙа эшләгән ветеран нефтселәр, бырауլауҫылар, геологтар һәм башҡалар йыйылды. Байрам саралары башланғансы Ишембай нефть һәм газ сығарыу идаралығының ветерандар советы рәйесе Рәсүл Ғүмәров менән әңгәмәләшеп алырға тура килде. Ул арҙаҡлы нефтселәрҙе хәтерләп, бөгөнгө ветерандарҙың тормош-көнкүрешенә лә туҡталып китте.

- Бөгөнгө көндә нефтселәрҙең ветерандар ойошмаһында хаҡлы ялдағы 4400 кеше иҫәптә тора. Ветерандар советы уларҙың тормошо менән ҡыҙыҡһынып тора. Еңеү көнө, Ололар көнөнә, һөнәри байрамға бүләктәр тапшырыу йолаһы ла онотолмай, - тине Рәсүл Абдрахман улы.

Сараға йыйылыусылар алдында Ишембай газ һәм нефть сығарыу идаралығы начальнигы Павел Арефьев сығыш яһаны. Ул предприятиеның

УРЫНДАҒЫ БАШЛАНҒЫСТАРҒА ЯРҘАМ ПРОГРАММАҺЫ

# Юл да яҡшырыр, һыу үткәргестәр ҙә ремонтланыр…

Район ауылдарында Урындағы башланғыстарға ярҙам программаһында ҡатнашыуға ҡағылышлы халыҡтың дөйөм йыйылыштары тамамланды

**Һәр ауылда быға тиклем ҡул теймәгән проблемалар етерлек. Улар хаҡында шул төбәктә йәшәүселәрҙән дә яҡшы белеүсе юҡ. Урындағы башланғыстарға ярҙам программаһы мәсьәләләрҙе халыҡ менән бергәләп хәл итеү мөмкинлеген аса.**

Белеүебеҙсә, тәүҙә был программа Урал аръяғы райондарында тормошҡа ашырылды. Яңы башланғыс уңышлы килеп сыҡты һәм ул тиҙҙән бөтә республикаға таралды. Ишембай районы ла яңылыҡты әүҙем ҡабул итте. 2016 йылда программала ҡатнашыуға 13 ауыл Советы теләк белдерһә, 11-е конкурста еңеү яуланы. 2017 йылда ҡатнашырға ниәт иткән барлыҡ ауыл Советтары ла үҙ маҡсаттарына өлгәште. Республика, район ҡаҙнаһынан бүленгән аҡса, бағыусылар, халыҡ көсө менән ауылдарҙағы теге йәки был проблема хәл ителде. Шуныһына иғтибар итергә кәрәк, бер ауыл Советы тик бер генә ауылды күрһәтә ала.




*Бәләкәй Байыҡта йәшәүселәр яҡын киләсәктә тигеҙ юлдарҙан йөрөүгә ышана.*

...лы клубына ла халыҡ тейешле ваҡытҡа йыйылды. Был ауыл Советына ҡараған ауылдар өсөн дә Урындағы башланғыстарға ярҙам программаһы ят күренеш түгел. Бер йылды Кинйәбулат мәҙәниәт йортоноң тамаша залы, икенсе йылды Байғужала спорт залы ремонтланды. Һәр ауыл был программаның ярҙамын ҡулланырға тырыша. Бәләкәй Байыҡ халҡының татып өлгөргән. 1994 йылда төҙөлгән мәҙәниәт йорто яңыртыуға, ремонтлауға мохтаж булһа, быйыл программала ҡатнашып тәҙрә-ишектәр алмаштырылған, кабинеттарҙа линолиум түшәлгән, китапханала йылытыу системаһы алмаштырылған. Элек китапханала һалҡын үҙәккә үтһә, хәҙер инде бында йылы, төрлө саралар үткәреү өсөн дә уңайлы. Кеҙәндәрҙең артабан программа-

...тан Көҙән халҡы программала йәнә ҡатнашырға теләк белдерҙе. Яңы тәҡдимдәр, кәңәштәр яңғыраны. Кеҙән – бөйөк шәхес, яҡташыбыҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуған төйәге. Уның ауылы, музейы менән танышырға килеүсе ҡунаҡтарҙың юлы өҙөлмәй. Шуға ла был төбәктең төҙөк, күркәм булыуы бик мөһим. Көҙән халҡы ауыл юлдарын рәтләүҙе әлеге көндә иң көнүҙәк мәсьәлә тип билдәләнә.

**ЙӘНЫРЫҪ** клубында ла йыйылыш үтте. Был ауылда Урындағы башланғыстарға ярҙам программаһы булышлығында һыу алыу башняһын капиталь ремонтларға тигән ҡарар сығарҙылар.

Әйтергә кәрәк, быға тиклем Йәнырыҫ ауыл Советына ҡараған Ҡыяуыҡ ауылы халҡы ла программанан файҙаланып һыу үткәргестәр системаһын ремонтлаған. Хәҙер ҡыяуыҡтарҙың күбеһе өйҙәренә лә һыу үткәреп, йәшәү өсөн тулы уңайлыҡтар булдырған.

**ИШӘЙ** ауыл Советынан был юлы программала Яңы Ауыл халҡы ҡатнашырға ниәтләй.

иктисади хәле, киләсәккә маҡсаттары менән таныштырҙы.

- Коллектив алға ҡуйылған нефть сығарыу планын арттырып тапшырыу, нефть ҡатламдарының ҡеүәтен арттырыу өсөн фән ҡаҙаныштарын, заманса ысулдарҙы ҡулланыу арҡаһында яҡшы күрһәткестәр менән эшләп киләбеҙ, - тине ул. "Башнефть" берләшмәһенән килгән етәкселәр ҙә "Ишембайнефть" идаралығы коллективының тотороҡло эшләүен билдәләне. Ветерандар хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашыусыларға Рәхмәт хаттары һәм Почет грамоталары тапшырыу тантананың иң күркәм мәле булды. Улар араһында оҙаҡ йылдар Ишембай быраулау эштәре идаралығында эшләгән элекке профсоюз комитеты етәксеһе Борис Плахин да булды. Мәҙәниәт йорто артистарының һоҡланғыс сығыштары байрам тәьҫораттарын тағы ла арттырып ебәрҙе. Бигерәк тә байрамға саҡырылған Рәсәйҙең, Башҡортостандың һәм Татарстандың атҡаҙанған артисы Нәзифә Ҡадированың сығышын ветерандар алҡыштарға күмде. Ветерандарҙы сәй табынына йыйып, күңелебеҙҙе күреү бик яҡшы. Ишембай нефтенең данлы йылдарын хәтерләп, байрам кисерештәре менән уртаҡлашып йылы әңгәмә ҡорҙоҡ. Сараға килгән барлыҡ ветерандарға яңы йыл бүләктәре тапшырылды. Оло быуын нефтселәр рухи ҡәнәғәтлек кисереп, күңел күтәренкелегендә таралышты.

**Юнир ТИМЕРБУЛАТОВ,**
**нефть сәнәғәте ветераны.**

**ЭТКОЛ** ауылында уҙған йыйылышта 90-ға яҡын кеше ҡатнашты. Шуныһы һоҡландырҙы сараға Аҙнай, Уразбай ауылдарынан да килделәр. Ғөмүмән, был ауыл Советы халҡы элек-электән үҙҙәренең берҙәмлеге менән айырылып тора. Бер ауылға ярҙам кәрәккәндә башҡалары ла дәррәү ҡушыла. Быйаса, мәҫәлән, Урындағы башланғыстарға ярҙам программаһы нигеҙендә Этҡол мәктәбендә тәҙрәләр алмаштырылһа, эштән күрше ауыл халҡы ла ситтә ҡалмай, улар ҙа үҙ өлөшөн индерә.

Был юлы ла йыйылыш йәнле генә барҙы. Ишембай районы муниципаль районы хакимиәте башлығының иҡтисад һәм финанс һорауҙары буйынса беренсе урынбаҫары Мансур Ҡунаҡов проғраммының тәртибе тураһында ентекле аңлатты. Ауыл хакимиәте башлығы Нәсимә Әйүпова быйыл Урындағы башланғыстарға ярҙам проғраммаһы буйынса башҡарылған эшкә йомғаҡ яһаны. Халыҡ артабан да унда ҡатнашырға, файҙаһын күрергә ҡарар итте. Эткол ауылындағы "Дуҫлыҡ" балалар баҡсаһының ҡыйығынан ямғыр мәлендә һыу үтеүе, тәҙрәләренән ел өрөүе проблемаһы күтәрелде. Был хаҡта ентеклерәк итеп ауылдың балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Гөлнара Ғәлиәскәрова ла әйтеп үтте. Әлбиттә, бирҙә, тастар теҙеп кенә ҡыйыҡтан һыу үтеү мәсьәләһен хәл итеп булмаясаҡ. Шуға ла йыйылған халыҡ дәррәү тауыш менән балалар баҡсаһының ҡыйығына капиталь ремонт эшләргә тигән уртаҡ ҡарарға килде. Дөйөм тауыш менән һәр йорттан 500-әр һум аҡса йыйырға булдылар.

*Шуныһы һоҡландырҙы, Этколда үткән йыйылышҡа Аҙнай, Уразбай ауылдарынан да килделәр. Ғөмүмән, был ауыл Советы халкы элек-электән үҙҙәренең берҙәмлеге менән айырылып тора. Бер ауылға ярҙам кәрәккәндә башкалары ла дәррәү кушыла. Былтыр, мәҫәлән, Урындағы башланғыстарға ярҙам программаһы нигеҙендә Эткол мәктәбендә тәҙрәләр алмаштырылһа, эштән күрше ауыл халкы ла ситтә калмай, улар ҙа үҙ өлөшөн индерә.*

**БӘЛӘКӘЙ БАЙЫҠ** ауылында үҙҙәренең хәл итә торған мәсьәләләре бар. Улар программала ҡатнашып, иң элек ауыл эсендәге юлдарҙы ремонтларға кәрәк тип тапты. Һәр йорттан йыйыласаҡ аҡса күләме лә билдәләнде. Хәҙер инде ауыл халҡының маҡсаты – конкурста еңеп сығыу. Яҡын киләсәктә бәләкәй байыҡтарға тигеҙ, матур юлдарҙан йөрөргә яҙһын.

**КӨҘӘНДӘР** ҙә Урындағы башланғыстарға ярҙам проғраммаһының файҙаһын мала ҡатнашыу, еңеү ниәте ҙур. Йыйылышҡа халыҡ та байтаҡ ҡына килде, тәҡдимдәре лә ниғеҙле булды. Сара урындағы сәнғәт оҫталарының музыкаль номерҙары менән башланып китте.

Көҙән ауыл хакимиәте башлығы Айрат Алтынбаев Урындағы башланғыстарға ярҙам программаһы буйынса быйаса башҡарылған эшкә йомғаҡ яһап, айырыуса әүҙем ауылдаштарына Рәхмәт хаттары тапшырҙы. Бер тауыш - яңы Ауылда йәшәүселәр былтыр уҡ ошо программа ярҙамында, һыу менән тәьмин итеү селтәрҙәрен ремонтлау теләген белдергәйнеләр, уларҙың ниәтенә ҡаршы килмәнек, - ти Ишәй ауыл хакимиәте башлығы Гөлнара Кәримова.

Иҫкергән, сереғән һыу үткәргестәр ысынлап та ауыл халкының үҙәгенә үтә. Шуға ла йыйылышта Үҙәк урамда һыу проблемаһын хәл итеү мәсьәләһе күтәрелде. Һәр йорттан 2500-әр һум аҡса йыйырға булды яңы ауылдар.

Урындағы башланғыстарға ярҙам проғраммаһында ҡатнашыуға арналған йыйылыштар йәнле генә үтеп китте. Ауылдарҙың төрлеһе төрле проблемаларын күрһәтте. Уларҙың барыһының да уңышлы тормошҡа ашыуын теләйек.

**Резеда ШӘНГӘРӘЕВА.**




*Көҙән ауылы халҡы дәррәү юл ремонтлау өсөн тауыш бирҙе.*